УДК 818.992.71

# БЕЙСЕМБАЙ КЕНЖЕБАЕВ ҺӘМ ТӨРКИ ТЕЛЛЕ ХАЛЫҠТАР ӘҘӘБИӘТЕ ҒИЛЕМЕ
# SCIENCE LITERATURE OF TURKIC-SPEAKING PEOPLES AND BEISENBAI KENZHEBAIULY

М.ИҘЕЛБАЕВ*

**Резюме**

Статья посвящена творчеству выдающегося казахского ученого и общественного деятеля – тюрколога, литературоведа, фольклориста, критика, переводчика, журналиста Бейсембая Кенжебаева. Его самоотверженная деятельность и смелые научные открытия в условиях советской идеологии в области истории казахской литературы и словесности тюрко-язычных народов дали возможность ученым-тюркологам пересмотреть старые научные концепции и изучить древние и средневековые литературные памятник с совершенно с новой точки зрения.

**Ключевые слова:** тюрколог, концепция, Бейсембай Кенжебаев, история казахской литературы.

**Summary**

The article is devoted to creativity of the outstanding Kazakh scientist and public figure – turkologist, literary critic, folklorist, critic, translator, journalist of Beysembay Kenjebayev. His selfless and courageous activities of scientific discoveries in the conditions of Soviet ideology in the history of Kazakh literature and literature of Turkic-speaking peoples have enabled scientists to reconsider old Türkologists scientific concepts and explore the ancient and medieval literary monument with a completely new perspective.

**Key words:** turcologist, concept, Beisenbai Kenzhebayev, history of Kazakh literature.

Башҡорт әҙәбиәте тарихы менән мин XX быуаттың 60 – 70-се йылдарында мәктәптә, юғары уҡыу йортонда таныштым. Тарих тигәнем совет дәүерен генә үҙ эсенә ала ине. Ә башҡорт һәм туғандаш төрки халыҡтары һүҙ сәнғәте тарихының боронғо замандарҙан уҡ уртаҡ икәнлеген ни бары аспирантурала уҡыған йылдарҙа ғына белдем. Бөгөнгөләй хәтеремдә, 1978 йылда Башҡортостандың башҡалаһы Өфөлә элеккке СССР-ҙың союздаш

* Доктор филологических наук, профессор, Башкирский государственный университет, Уфа-Башкортостан.
Professor, Doctor of philology, state university of Baskir, Ufa-Bashkortostan. E-mail: miraside@mail.ru

һәм автономиялы республикаларынан төрки теле халыҡтар әҙәбиәтен өйрәнеүсе арҙаҡлы ғалимдар ҡатнашлығында халыҡ-ара ғилми конференция уҙғарылды. Былдай кимәлдәге форумдар совет заманында бик һирәк үтә ине. Конференцияла күтәрелгән төп проблема ла бығаса һис ҡасан ҡуҙғатылмаған өр-яңы һәм үтә мөһим өлкәгә ҡағылышлы булды: төрки телле халыҡтарҙың яҙма әҙәбиәтен дөйөм бер системала өйрәнеү. Тимәк, VI–X быуаттарҙағы Йәнәсәй, VIII быуат башындағы Орхон яҙмаларынан башланған дөйөм төрки ҡомартҡылары – күпселек төрки халыҡтары яҙма әҙәбиәтенең шишмә башы, ә урта быуаттарҙың хәҙер бөтә донъяға билдәле булған мәшһүр әҫәрҙәре – уртаҡ хазинаһы икән.

Әлеге конференцияны үткәреүгә ул саҡтағы СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты профессоры, шул институттың әҙәбиәт бүлеге мөдире, арҙаҡлы ғалим Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов ҙур көс һалды. (Ул әле лә иҫән-һау, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының академигы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы). Бөтә төрки донъяһының әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә иң һыҙғанып эшләгән үҙе кеүек олуғ белгестәрҙе Өфөгә бергә йыя алды. Ҡаҙағстан республикаһынан бер төркөм ғалимдар менән филология фәндәре докторы, профессор Рахманҡол Бирҙебаев килгәйне. Миңә, ул саҡтағы аспирантҡа, хөрмәтле профессорҙан интервью алып, «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫтырыу бәхете тейҙе.

Ни өсөн сығышымды ошо ваҡиғанан башланым? Шул заманды иҫкә төшөрәйек. 1978 йыл, төрки теле халыҡтар әҙәбиәтенең уртаҡ тамырҙары тураһында һөйләшеү Башҡортостан ерлегендә Ғ. Б. Хөсәйенов башланғысы менән тәү башлап ҡуҙғатыла. Беҙ, ғилем һуҡмағына яңы аяҡ баҫҡан бер төркөм йәштәр, бәләкәй халыҡтарға үҙҙәренең революцияға тиклемге тарихын, һүҙ сәнғәтен өйрәнеү тыйылған шарттарҙа остазыбыҙҙың ҡыйыулығына һоҡландыҡ, уның менән ғорурландыҡ.

Баҡһаң, төрки ғилеме донъяһында совет дәүеренең аяуһыҙ шарттарында тарихи дөрөҫлөктө халыҡҡа еткереү өсөн үҙ-үҙҙәрен аямаған тағы ла фиҙакәрерәк шәхестәр булған икән. Шуларҙың береһе – ҡаҙаҡ халҡының бөйөк улы, мәшһүр ғалимы Бейсембай Кенжебаев.

Б. К. Кенжебаев тураһында йәш саҡтан уҡ ишеткәнем бар ине. Минең китапханала ғалимдың 1959 йылда «Казахские писатели-

демократы начала XX века» тигән темаға яҡлаған докторлыҡ диссертацияһының авторефераты ла һаҡлана. Был арҙаҡлы шәхес менән яҡындан ҡыҙыҡһыныуым 2011 йылдан башланды. Шул йылдың апрелендә Ҡаҙағстан Республикаһының Төркстан ҡалаһына Евразияның төрки донъяһынан «Едиге» эпосына арналған халыҡ-ара ғилми конференцияға күп ғалимдар йыйылды. Тәүге көндөң кисендә ҡунаҡханала йәшәгән ғалимдар үҙ-ара танышын, һөйләшеп ултырған бүлмәгә теремек, абруйлы һәм зыялы ҡиәфәтле бер ир-ат килеп инде. Ҡунаҡтарҙың күбеһе уның танышы икән. Шунда уҡ хәбәргә ихлас ҡушылды. Һүҙҙән һүҙ сығып, ул Бейсембай Кенжебаев тураһында һөйләп алып китте. Минең ҡыҙыҡһынып биргән һорауҙарыма тулы яуап ҡайтарҙы. Әхмәт Йәсәүи исемендәге халыҡ-ара ҡаҙаҡ-төрөк университетының вице-президенты Күлбәк Ергөбәк Сәрсен улы булып сыҡты ул. Башҡортостандан килгән делегация менән тиҙ арала уртаҡ тел тапты. Өс көн барған конференцияла Күлбәк Ергөбәк менән ныҡлап таныштыҡ. Өфөгә ҡайтҡас та, хәбәрләшеп торҙоҡ. Миңә 2013 йылда ла Төркстанда Төркиәттең сираттағы конгресында ҡатнашыу бәхете тейҙе. Был осрашыу беҙҙең аралағы бәйләнеште тағы ла нығытып ебәрҙе.

Мине Күлбәк Ергөбәктең кеше һәм ғалим булараҡ күркәм сифаттары араһынан берәүһе айырыуса хайран ҡалдырҙы. Ул үҙенең остаздарын, бигерәк тә – Бейсембай Кенжебаевты күңел түрендә изгеләштереп һаҡлай, уның исемен һәм эшмәкәрләгән киләһе быуындарға еткереү өсөн етди хәстәрлек күрә. Минең белеүемсә, уның арҙаҡлы ғалимдың үҙенә генә арналған тиҫтәләгән хеҙмәттәренең иң тәүгеләре ни бары 28 –29 йәшендә генә яҙылған.

Хөрмәтле ҡаҙаҡ туғандар! Һеҙ бөтәгеҙ ҙә Бейсембай Кенжебаевтың тормош юлын һәм ысын мәғәнәһендә фиҙакәрлеккә торошло ижадын миңә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ беләһегеҙ. Миңә был хаҡта ентекләп һөйләп тороу урынһыҙ булыр ине. Бары тик бөйөк ғалимға булған мөнәсәбәтемде генә һеҙгә еткерергә теләйем.

Ҡаҙаҡ халҡының бәхетенәлер, Хоҙай уға һигеҙ тиҫтә йылдан ашыу ғүмер биргән. Ә ғалимдың ошо ғүмер эсендә үҙ туған халҡы өсөн башҡарған эштәре ҙур бер коллективтың (ғилми институттың, тип әйтәйек) бер быуатлыҡ эшенә торошло. Һөнәр өлкәләре, эшмәкәрлек йүнәлештәре, ижади табыштары, ғәйәт әһәмиәтле һөҙөмтәләре менән ысынлап та бер генә кешегә бирелгән ғүмергә һыйырлыҡ түгел. Мәскәүҙә һәм Тыуған илендә өс уҡыу йортонда белем алған журналист, республиканың иң абруйлы

гәзиттәренең, берләштерелгән дәүләт китап нәшриәтенең баш редакторы, Фәндәр академияһында ғилми тикшеренеү институтының әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире, Әл-Фараби исемендәге Ҡаҙаҡ милли университеттың ҡаҙаҡ әҙәбиәте кафедраһы мөдире, Мәскәүҙә СССР Юғары Советы аппараты һәм уның органы булған «Ведомости Верховного Совета» баҫмаһының хеҙмәткәре һәм башҡалар. Дәүләт эшмәкәре, педагог, әҙәбиәт ғилеме белгесе, донъя һәм рус классик әҙәбиәте өлгөләрен ҡаҙаҡ теленә тәржемәсеһе, фольклорсы, публицист булараҡ үтеп инмәгән өлкәһе юҡ.

Минең күҙ алдыма килтереүемсә, бындай шәхесте хөрмәтле Күлбәк Сәрсен улы ла, Бейсембай Кенжебаевтың 50-гә яҡын шәкерттәре – фән докторҙары һәм кандидаттары ла, барлыҡ ҡаҙаҡ халҡы ла оло ғорурлыҡ менән күңел түрендә йөрөтә ала. 2004 йылда бөйөк ғалимдың тыуыуына 100 йыл тулыу уңайы менән академик Р. Нурғали «Алаш туы астында. Маҡалалар менен зерттеулер» тигән йыйынтыҡ әҙерләп нәшер итә. Унда сығыш яһаған утыҙҙан ашыу автор Б. Кенжебаевтың үҙен һәм ижадын төрлө һында күҙ алдына баҫтыра. Мәҡәләләренең исемдәренә генә иғтибар итеп ҡарайыҡ – бөгөнгө күрененекле ҡаҙаҡ ғалимдары өсөн Бейсембай Кенжебаев кем ул: Р. Бердибай – «Ғалим ғибрәте»; М. Ҡаратаев – «Яҡшы аға, изгелекле йән»; М. Серғалиев – «Ябайлыҡ менән ҡаҡшамаҫлыҡ»; Ҡ. Алдабиргәнов – «Бөйөк шәхес»; Н. Төрекүлов – «Арыу белмәҫ остаз»; Х Суиншәлиев – «Оло хеҙмәткәр, ғалим, остаз»; Ҡ. Ергөбәк – «Ҡуш ҡанат»; К. Сейдеханов – «Дуҫлыҡ дидары»; Т. Ҡожакеев – «Абзал азамат»; М.Ҡараҡулов – «Абзал шәхес, изгелекле аға»; М. Ҡараев – «Халыҡ улы, ил ҡәҙерлеһе»; М. Мағауин – «Остаз үлағаты»: М. Шындалиева – «Журналистиканың бәйтерәге» һәм башҡалар [3]. Үҙеңдән һуң килгән быуындың ошондай оло баһаһына ирешеү өсөн кем булырға, ни эшләргә кәрәк?

Фиҙакәр хеҙмәт. Хеҙмәттәге фиҙакәрлек. Был ике төшөнсә араһында уртаҡлыҡ та, айырма ла бар. Һәр кем үҙенең көндәлек эшенә яуаплы ҡарап, һайлаған һөнәренә оҙаҡ йылдар тоғро ҡалып, тырышлыҡ һала икән – тимәк, фиҙакәр хеҙмәт. Ә фиҙакәр хеҙмәттә фиҙакәрлек ҡылыу һәр кемдең ҡулынан килмәй. Ҡулынан килгән хәлдә лә, йөрәге етмәй. Бейсембай Кенжебаевтың һанап бөткөһөҙ хеҙмәт ҡаҙаныштары араһынан мин уның айырыуса ике тәүәккәл аҙымына баш эйер инем. Уларҙың икеһе лә – ҡаҙаҡ әҙәбиәте

ҡаҙаҡ әҙәбиәте яҙмышы ғына түгел, ә барлыҡ төркә халыҡтары һүҙ сәнғәтенең үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге хөрмәтенә ысын мәғәнәһендә фиҙакәрлек ҡылынған подвиг.

Был хаҡта һүҙ алып барғанда башҡорт әҙәбиәтенең XX быуаттың утыҙынсы йылдары эсендәге хәле күҙ алдына баҫа. Милли мәҙәниәттең йөҙөк ҡашы булған шәхестәр нахаҡҡа ғәйепләнеп, бер-бер артлы ҡулға алына. Уларҙың күбеһе кире әйләнеп ҡайта алмай. Ғ. Амантай, Т. Йәнәби, Д. Юлтый, А. Таһиров, Б. Ишемғол кеүек классиктар матбуғатта революцияға тиклемге яҙма ҡомартҡылар хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡан өсөн генә баштарын һала. Барыбыҙ ҙа беләбеҙ, бындай бәлә илдең төрлө төбәктәрендә хөкөм һөрҙө, оҙаҡ йәшәүсән булды. XX быуатта бары тик совет дәүере әҙәбиәтен генә өйрәндек. Совет осоро идеологияһы буйынса, илдәге бәләкәй халыҡтарҙың яҙмаһы ла, әҙәбиәте лә булмаған, уны Октябрь революцияһы ғына алып биргән, тип белә инек. Ғалим Ғ. Хөсәйенов етәкселегендә башҡарып сығылған алты томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»ның революцияға тиклемге әҙәбиәткә арналған томдары ун йылдан ашыу нәшриәттә ятып, ни бары 90–сы йылда ғына донъя күрә алды. Бәлки бөтөнләй күрә алмаған да булыр ине…

Бейсембай Кенжебаев шул репрессиялар йылдарында уҡ XIX быуат аҙағы – XX быуат башы ҡаҙаҡ яҙыусы-демократтарын өйрәнә, ә 1959 йылда, Алма-Атала үткәрелгән халыҡ-ара ғилми конференцияларҙың береһендә, төрлө яҡтан йыйылған ғалимдарҙы хайран ҡалдырып, ҙур асышҡа торошло доклад менән сығыш яһай: Йәнәсәй-Орхон текстарынан башланған дөйөм төрки яҙмалары – төрки телле халыҡтарҙың уртаҡ хазинаһы, уларҙың һәр ҡайһыһы был ҡомартҡыларҙы үҙ ерлеге һүҙ сәнғәтенең шишмә башы тип өйрәнә ала. Арҙаҡлы ғалим ҡаҙаҡ һәм төрки телле туғандарш халыҡтар әҙәбиәте тарихының дәүерҙәргә бүленешен дә өр-яңыса тәҡдим итә. Унда V–XV быуаттар дөйөм төрки дәүере тип күрһәтелә.

Бер ниндәй ҡыйыу асыш та тотҡарлыҡһыҙ ғына тормошҡа ашырылмай. «Күпселек ғалимдар ҡаҙаҡ әҙәбиәте тарихын төрки халыҡтарына уртаҡ дәүерҙән башларға кәрәк тигән Б. Кенжебаев тәҡдименә ҡаршы сыҡты», – тип яҙа профессор Ҡ. Алпысбаев үҙенең бер хеҙмәтендә. Артабан унын төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, маҡсатына ирешеүен ҡаҙаҡ әҙәбиәте ғилемендә яңы мәктәп барлыҡҡа килтереүенә тиңләй: «Остаз - ғалимдың үҙ маҡсатына

етеү юлындағы ҡурҡыу белмәҫ ныҡышмаллығы, шәкерттәренең арымай-талмай эҙләнеүе, бөтмәҫ энергияһы, егәрлелеге һөҙөмтәһендә «ҡаҙаҡ әҙәбиәте 18–се быуаттан башлана» тигән ҡағиҙә юҡҡа сығарылып, ҡаҙаҡ әҙәбиәте тарихы мең ярым йыл самаһы ваҡытҡа ары шылдырылды… Шулай итеп, ҡаҙаҡ әҙәбиәтен өйрәнеү ғилемендә Б. Кенжебаев мәктәбе ҡалыплашты» . Был һүҙҙәргә тағы ла шундай асыҡлыҡ индерергә мөмкин. Беренсенән, Бейсембай Кенжебаев ҡатмарлы заманда ауыр кәртәләрҙе йырып ярған юлға бер аҙ һуңлабыраҡ баҫҡан төрки телле башҡа халыҡтар ғалимдары артыҡ ауырлыҡ кисермәне, сөнки был юл арҙаҡлы ҡаҙаҡ ғалимы һәм уның шәкерттәре тарафынан таҙартып ҡуйылғайны. Икенсенән, Б. Кенжебаев булдырған мәктәп ҡаҙаҡ ғалимдары өсөн генә түгел, ошо юлды һайлаған барлыҡ ғалимдар өсөн дә уның уртаҡ мәктәбе булды.

Бер нисә тиҫтә халыҡтың әҙәбиәте тарихын нигеҙенән үҙгәреш индереп ебәргән доклад менән конференцияла бер тапҡыр сығыш яһау үҙе генә лә һәр кемдең ғилми биографияһында онотолмаҫлыҡ подвиг булып ҡалыр ине. Ә Б. Кенжебаевтың ошо 1959 йылғы халыҡ-ара конференцияға тиклемге эшмәкәрлеге лә, унан һуңғыһы ла бер-бер артлы подвигтар теҙмәһенән тора. Ғилем донъяһына иғлан иткән яңылыҡты юғары фәнни кимәлдә иҫбатлау өсөн ул ифрат ҙур көс һала, шәкерттәрен дә үҙ артынан әйҙәй. Боронғо һәм урта быуаттар дөйөм төрки яҙма ҡомартҡылары – хәҙерге төрки телле халыҡтар һүҙ сәнғәтенең нигеҙ ташы икәнен раҫлау йүнәлешендә ҡаҙаҡ ерлегендә күп һанлы мәҡәләләр, тематик йыйыйнтыҡтар, конференциялар материалдары, монографиялар, хрестоматиялар донъя күрә, ҡаҙаҡ һәм рус телдәрендә күп томлыҡ ҡаҙаҡ әҙәбиәте тарихы яҙыла. Улар ҡәрҙәш телле күрше төбәктәр ғалимдары өсөн дә таяныс, сығанаҡ хеҙмәтен үтәй. Мин дә аспиарант йылдарынан башлап уларҙы иркен ҡулландым, ә тәүгеләрен – 1967 йылда Б. Кенжебаев, Х. Суйыншалиев, М. Жолдасбеков әҙерләп баҫтырған «Боронғо ҡаҙаҡ әҙәбиәте хрестоматияһын», 1982 йылда сыҡҡан «XV–XVIII быуаттарҙағы ҡаҙаҡ поэзияһын», М. Ғабдуллиндың 1974 йылғы «Ҡаҙаҡ халҡының ауыҙ әҙәбиәтен», 1975–1985 йылдарҙағы 4 томлыҡ «Ҡаҙаҡ ҡульяҙмаларының ғилми сифатламаһын», М. Ауэзовтың, Е. Исмаиловтың, М. Магауиндың, К. Өмирәлиевтың боронғо ҡомартҡыларға арналған китаптарын шәхси китапханамда ҡәҙерләп һаҡлайым, ә ҡаҙаҡ һүҙ сәнғәтен өйрәнеү торошон Ч. Вәлиханов, И. Алтынсарин, Б. Кенжебаевтарҙан башлап бөгөнгө

К. Ергөбәккә, уның быуындаштарына һәм шәкерттәренә тиклемге хеҙмәттәрҙән ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам.

Арҙаҡлы М. Ауэзовты телгә алғас, уның үлемһеҙ «Абай юлы»на ҡағылмау мөмкин түгел. Был эпопеяның ике китабы ла XX быуаттың 50–60-сы йылдарында башҡорт телендә донъя күрҙе, башҡорттар таафынан яратып ҡабул ителде. Тәржемесеһе – Нәжип Иҙелбаев (Ул минең фамилиялашым. Һуңғы ваҡытта мин дә бер аҙ ҡаҙаҡ теленән башҡортсаға тәржемә менән шөғөлләнәм. Ҡыҙғаныҫҡамы, бәхеткәме – Нәжип аға Иҙелбаев «Абай юлы»н алдараҡ тәржемә итеп өлгөргөн, икенсе Иҙелбаевҡа ҡалдырмаған). Ул йылдарҙа туған телендә тарихи әҫәр уҡыу үтә һирәк тәтегән башҡорт «Абай юлы» өсөн кемгә бурыслы? Һәр кемдең күҙ алдына, әлбиттә, иң алда автор менән тәржемәсе килеп баҫа: Мөхтәр Ауэзов менән Нәжип Иҙелбай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уҡыусы ошо китаптың донъя күреүе өсөн фиҙакәрлек ҡылған тағы бер кешенең ер йөҙөндә барлығын да белмәй. Егерменсе быуаттың 40-сы йылдарында Ҡаҙағстандың Берләштерелгән дәүләт нәшриәтендә баш мөхәррир булып эшләгән Бейсембай Кенжебаевтың, барлыҡ ҡаршылыҡтарға ҡарамай, «Абай юлы»н нәшер итеүҙе үҙ өҫтөнә алыуын яҙыусы Жолтай Жумат «күрәләтә башын түмәргә һалыу» тип атай [2]. Аҙаҡ М, Ауэзов менән Б. Кенжебаевтың ҡаҡшамаҫ дуҫлығына, «Абай юлы»ның донъя күреүенә арналған күп кенә хеҙмәттәр баҫыла. Бөгөнгө ҡаҙаҡ ғалимдарының раҫлауынса, шулар араһында иң тулыһы һәм ҡиммәтлеһе – Кулбәк Ергөбәктең «Арыстар мен ағыстар» исемле китаптары серияһына ингән яҙма булып сыға. Шул уҡ Жолтай Жумат «Күлбәк Ергөбәк хәтирәләренең ҡиммәте -- беҙҙең өсөн сикһеҙ» тип баһалай [2]. Билдәле булыуынса, ҡаҙаҡ халҡының бөйөк яҙыусыһы М. Ауэзовтың эпопеяһы бөтә донъяла танылыу тапты.

Минең хәтергә ошоға оҡшаш тағы бер ваҡиға килеп баҫа. Уны әҙәбиәт донъяһында ҡайнағандарҙың барыһы ла яҡшы белә. XX быуаттың 1950–1954, 1958–1970 йылдарында «Новый мир» журналының баш редакторы булып эшләгән күренекле шағир А. Т. Твардовский Александр Солженицындың «Один день Ивана Денисовича» тигән повесын баҫтырып сығара. Аҙаҡ был хаҡта бөтә донъяға шаулайҙар. Бейсембай Кенжебаев подвигы ла унан һис кенә лә кәм түгел, хәүефлелеге яғынан бәлки байтаҡҡа юғарыраҡтыр. Ул да бөтә донъяның белеүенә лайыҡ. Етмәһә,

Бейсембай Кенжебаевтың был изге эше – уның бик күп подвигтарының береһе генә. Уның бөтә ғүмере фиҙакәрлектәрҙән тора.

Мин был мәҡәләлә XX быуат ҡаҙаҡ әҙәбиәте һәм әҙәбиәт ғилеменең бөйөк һәм трагик яҙмышлы бер генә фиҙакәр вәкиле хаҡында һүҙ ҡуҙғаттым. Уның кеүектәр ҡаҙаҡтар араһында күп булған. Тарих фәндәре докторы Бөркитбай Аяған үҙенең «Тоталитаризм в духовной сфере» тигән мәҡәләһендә шул уҡ Мөхтәр Ауэзов, Петр Галузо, Есмагамбет Исмаилов, Хажым Джумалиев, Ауелбек Конратбаев, Әминә Маматова, Тимерғәли Нуртазин һәм башҡаларҙың исмдәрен килтерә [3]. Ҡәрҙәш телле күрше халыҡтарҙа ла – шул уҡ хәл.

Кем белә, әгәр ошондай бөйөк һәм трагик яҙмышлы шәхестәр булмаһа, бөйөклөккә дәғүә иткән төрки теле халыҡтар әҙәбиәте лә, XX быуат сиктәрендә бикләнеп ҡалып, трагик яҙмышҡа дусар булыр ине.

### Әҙәбиәт

1. Аяган Б. *Тоталитаризм в духовной сфере* //Ленинская смена, 2015, 13 марта.

2. Жумат Жолтай. *Тихий подвиг, или Как увидела свет первая книга эпопеи.* М. Ауэзова «Путь Абая» //Казахстанская правда, 2013, 13 июля.

3. Нурғали Р. *Алаш туы астында: Маҡалалар менен зерттыулер.* – Алматы, 2004.